**Художестволы-эстетик үҫеш буйынса мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә «Өләсәйем һандығының эсе серҙәргә тулған» темаһына ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге**

**Маҡсат:** Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары милли костюмы хаҡында төшөнсә биреү һәм милли башҡорт кейеменең бер мөһим элементы - алъяпҡыстың үҙенсәлеген асыу.

**Программа йөкмәткеһе:** балаларҙы башҡорттарҙың төрлө биҙәү-ғәмәли сәнғәте менән таныштырыу, системаға һалыу, “биҙәү-ғәмәли сәнғәт» төшөнсәһен нығытыу, башҡорт ҡатын-ҡыҙ кейеме элементының әйтелеше өҫтөндә эшләү, башҡорт орнаменттары менән таныштырыуҙы дауам итеү, алъяпҡысҡа башҡорт орнаменттарын ҡырҡып йәбештерергә, үҙ ҡулдары менән эшләгән әйбергә йыйнаҡ һәм һаҡлыҡ менән эш итергә өйрәтеү.

**Төп белем биреү өлкәһе:** художестволы-эстетик үҫеш.
**Интеграция өлкәләре:** танып белеү, социаль-коммуникатив үҫеш, физик үҫеш (хәүефһеҙлек, уйын, коммуникация).

**Һүҙлек эше:** биҙәү-ғәмәли сәнғәт, ҡулъяулыҡ, елән, ҡушаҡ, селтәр, сәкмән, ҡашмау, камзол, ситек.

**Эш алымдары:** әңгәмә, уйын «Ҡулъяулыҡ», орнаменттар менән биҙәлгән милли башҡорт кейемдәрен күрһәтеү, практик эш.

**Йыһазландырыу:** ҡурай көйө аудиояҙмаһы, һандыҡ, алъяпҡыс, камзол, ситек, биҙәүестәр, ҡашмау, ҡулъяулыҡ, йәшел һәм ҡыҙыл төҫтәргә төшөрөлгән ҡағыҙ орнаменттар, ҡайсы, елем, ҡырҡылған әҙер ҡағыҙ алъяпҡыстар, һыулы салфеткалар.

**Барышы**

**Ойоштороу моменты.**

Ҡурай көйө аҫтында тәрбиәсе һәм балалар төркөмгә инәләр. Түңәрәккә теҙелешеп ултыралар.

Тәрбиәсе: Беҙгә ҡунаҡтар килгән, һаулыҡ һорашайыҡ, ҡыҙҙар һәм малайҙар! Әйҙәгеҙ түңәрәк яһап ултырайыҡ.
-Балалар, миңә ҡарағыҙ әле, мин өҫтөмә нимә кейгәнмен? Нисек кейенгәнмен? Эйе, мин милли башҡорт кейемендә. Һеҙ, балалар, “Бала саҡ

донъяһы", "Тиктормаҫ" магазиндарына барғанда, мин кейгән кеүек күлдәк күргәнегеҙ бармы? Юҡтыр, моғайын?
Элек барыһы ла милли кейемдәрҙә йөрөгәндәр. Милли кейем – милли төҫ, милли сифатты сағылдырған бер билдә генә түгел, ә халыҡтың оло тарихын, сәнғәтсән ҡеүәһен күрһәткән дәлил ул.
Ҡыҙҙар, малайҙар, хәҙерге заманда һеҙҙең атайҙарығыҙ, әсәйҙәрегеҙ милли күлдәктә йөрөйҙәрме? Юҡ. Хәҙер музейҙарҙа, концерттарҙа, театрҙа ғына күреп була.

-Балалар, өләсәйем миңә һандыҡ ҡалдырған. Бәләкәй саҡта шул тиклем ҡыҙыҡ була торғайны, һандыҡтың эсендә нимәләр ятыуын белге килә ине. Ә хәҙер уларҙы мин һеҙгә лә күрһәтә алам. Быныһы камзул була. Еңһеҙ өҫ кейеме: ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа кейгән. Ҡашмау - баш кейеме. Гәрәбә, мәрйен, тәңкә, ынйы менән биҙәп эшләнгән. Ҡортбашын да тегеп ҡуялар. Күҙ теймәҫкә тигәндәр. Борон ҡортбашы, ҡусҡар биҙәге һалып биҙәгәндәр, ҡабырсаҡтан ҡырҡып тәңкә эшләнгән. Был һандыҡта күлдәк, ситек тә бар.
-Ҡарағыҙ әле, балалар, тәңкә, мәрйен, ынйыларҙы матурлыҡ өсөн генә текмәгәндәр, улар яман күҙҙәрҙән дә һаҡлап торған. Нағышлап орнаменттар һалғандар. Хайуандар, үҫентеләр, геометрик фигуралар сиккәндәр. Бына ошо ҡусҡар тип атала – һарыҡтың мөгөҙөн хәтерләтә. Быныһы ҡояш нурҙары. Ошолары ниндәй геометрик фигураға оҡшаған?

Ял минуты.
**Төп өлөш.**
- Ҡыҙҙар, малайҙар, ҡарайыҡ әле, өләсәй һандыҡҡа тағы нимәләр һалған икән?
- Был ҡулъяулыҡ. Әйҙәгеҙ "Ҡулъяулығым" уйынын уйнап алайыҡ. Түңәрәккә ултырайыҡ. Мин һанашмаҡ әйтәм, кем дә кем тороп ҡала, шул уйынды башлаусы була:
Алабуға, дегәнәк.
Майлы ҡалас
Ярсыҡ-юрсыҡ.
Балтаңды ал да
Йүгереп сыҡ.

- Һин уйынды башлап ебәреүсе.
Йәшерен-йәшерен яулығымды
Йәшел ҡайын артында,
Һиҙҙермәйсә ташлап киттем
Бер иптәшем артына.

Тәрбиәсе: Балалар!  Хәҙер өҫтәл артына ултырғыстарға ултырайыҡ. Мин һеҙгә ҡағыҙ алъяпҡыстар таратам, ә һеҙгә уларҙы орнаменттар  ярҙамында биҙәргә тәҡдим итәм. Аппликация эшләйәсәкбеҙ. Өлгөгә ҡарап, матур ғына, таҙа ғына эшләргә тырышығыҙһөйләштекме? Елемле ҡулдарығыҙҙы салфетка менән һөртөргә онотмағыҙ. Бармаҡтарығыҙҙы ауыҙығыҙға ҡапмағыҙ.

**Йомғаҡлау.**

Тәрбиәсе: Кемдең алъяпҡысы матурыраҡ килеп сыҡты?

Кемдеке таҙараҡ?Ошо алъяпҡыстарҙы әсәйҙәрегеҙгә күрһәтерһегеҙ, бәлки тегеп кейҙерерҙәр!